Бөрйән районы үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы Тимер ауыл китапханаһы Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған район мультимедия презентациялар конкурсына

# “Тимер ауылы. Бөйөк Ватан һуғышы менең ғаиләм тарихында”

* **МАҠСАТТАРЫ**:
* 1. Һуғыштан һуңғы осорҙағы  Тимер ауылының тарихын өйрәнеү.
* 2. Ауыл халҡының һуғыштан һуңғы көн – күрешен өйрәнеү.
* 3. Уҡыусыларға патриотик тәрбиә, ауыл тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу.
* 4. Ауыл халҡының ғорурлоғо булып ҡалырлыҡ ваҡиғаларҙы,шәхестәрҙе асыҡлау.
*
* **БУРЫСТАРЫ:**
* 1. Бөйөк  Ватан һуғышынан һуң ауыр йылдарҙың михнәттәрен иңе һәм йөрәге аша бар ил менән бергә күтәргән быуындың хәтирәләрен йәш быуынға еткереү.
* 2. Көс еткеһеҙ һынауҙарҙы ғорур рәүештә күтәргән оло быуын кешеләренә оло хөрмәт күрһәтеү.
* 3. Ауыл тарихы менән ҡыҙыҡһыныу, тәрәнерәк белергә ынтылыш уятыу.
* 4.Авторы:Язаголова Нуриҙә Самат ҡыҙы.
* Етәксеһе:Язаголова Миңлегөл Таһир ҡыҙы

# Ҡалды йәшлек, ҡалды бала саҡ...

**Ҡалды йәшлек, ҡалды бала саҡ**
**Ҡанлы-йәшле йылдар араһында,**
**Ҡайҙа беҙгә затлы кейем**
**Булманы бит алмашы ла.**
**Өмөт хисе өләштек беҙ**
**Дөм-ҡараңғы ауылдарҙа.**
**Бирешмәнек дауылдарҙа,**
**Ҡарлы-боҙло яуындарҙа.**
**Суҡ-суҡ сәләм хаттар яҙҙыҡ**
**Әбейҙәрҙең улдарына.**
**Шаһит булдыҡ еңгәләрҙең**
**Һағышына, моңдарына.**
**...ҡалды йәшлек, бала сағым**
**Хәтәр йылдар араһында...**

Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн ал-ял белмәй эшләүселәр – Тимер ауылында йәшәүсе тыл ветерандары хаҡында мотлаҡ һөйләргә тейешмен, тип уйлайым. Бөйөк ватан һуғышы осоронда бөтә кешеләр алғы һыҙыҡта алышмаһа ла, һәр кемдең күңеле дошманды ҡыйратыусылар янында булған. Һәр кем еңеүгә үҙ өлөшөн индерергә ынтылған. Беҙ барыбыҙ ҙа Бөйөк Еңеүҙең ниндәй хаҡ менән яуланыуын хәтерҙә тоторға тейешбеҙ.

# Алтыншин Мөхәмәтдин Солтанмәхмүт улы

**(һуғыш башланғанда уға ни бары 15 йәш була)**



* Алтыншин Мөхәмәтдин 1926 йылда Бөрйән районы Тимер ауылында ғаиләлә иң өлкән бала булып донъяға килә. Ғаиләлә дүрт бала тәрбиәләнә. Мөхәмәтдин бабай иң өлкәне булғас, ҡалған балаларҙы ҡарау, йорт эштәрен башҡарыу уның иңенә төшә.
* Бөйөк Ватан һуғышы башланғас 1941 йылда Мөхәмәтдин бабайҙы Белорет ҡалаһына ФЗО-ға уҡырға ебәрәләр. ФЗО-ла ике ай уҡығандан һуң, шунда уҡ Белорет металлургия комбинатында эшкә ҡалдыралар…“Бөтәһе лә – фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү өсөн!” тигән ялҡынлы лозунг аҫтында эшләнек”, - тип хәтерләй Мөхәмәтдин бабай .

# Ғазина Кәбирә Зәбир ҡыҙына

Һуғыш башлағанда бары ун алты йәш була. 1925 йылда Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылында тыуған. Һуғыш башланғас та фермаға һауынсы булып эшкә сыҡҡан һәм шул уҡ мәлдә быҙауҙарҙы ла үҙе тәрбиәләгән. “Егерменән ашыу һыйыр һауа торғайным, ул һыйырҙарҙы иртән һауып сығарғас, колхозда бөтөнләй аттар булмағанлыҡтан баҫыуға ер һөрөүгә, ҡышын утын-бесән ташырға алып китә инек. Бер мәл урманға утынға барҙыҡ,ҡар ҡалын, ә һыйыр бик арыҡ, шунлыҡтан утынға ла көсө етмәй, көрттән дә атлай алмай. Һыйырҙың алдына йүгереп сығам да алдынан ҡарҙы тапап-тапап юл һалам, унан һуң кире йүгереп йөктөң артына сығып һыйырға йөктө этешкән булам үҙемсә. Аяҡтарҙа үрелгән алама ғына сабаталар, улары үҙәккә үтеп һыҙлайҙар. Ә һыйырҙы ла, утынды ла имен-аман ауылға алып ҡайтып еткерергә кәрәк.

# Баймырҙина Ғилмисафа Хисаметдин ҡыҙы.

(Һуғыш башланғанда уға ни бары 13 йәш булған)



* «Көҙөн ашлыҡ йыйыр мәл еткәс беҙҙе ураҡ урған ҡатын-ҡыҙҙар артынан башаҡ йыйырға сығарҙылар. Һәр классҡа йөкләмә бирәләр ине. Беҙ йыйған башаҡтарҙы келәткә алып барып уҡытыусыға тапшырабыҙ. Ә шул йыйған башаҡтарҙың исмаһам, берәүһен булһа ла, ауыҙға ҡабырға ярамай торғайны. Бер нисә бойҙай бөртөгө өсөн күпме кешене, хатта балаларҙы ла, төрмәгә тыҡтылар», - тип тын ғына хәтер ебен тағата Ғилмисафа инәй.




# Дәүләтбирҙин Әхмәтғәле Зата улы

(Һуғыш башланғанда уға 12 йәш була)

Дәүләтбирҙин Әхмәтғәле Зата улы 1929 йылдың август айында Тимер ауылында тыуған. Уның да бала сағы бик күптәрҙеке һымаҡ ауыр йылдарға тура килә. Әхмәтғәле бабай һуғыш башланғас та уҡ колхозда эш башлай.

«Үгеҙ менән ер һөрөргә сығарҙылар, үҙем һабан артында, саҡ ҡына күренеп барам. Үгеҙҙе ашыҡтырған булып бар көсөмә һелтәнеп ҡыуам, норманы үтәргә кәрәк бит инде, ә үгеҙ ыжламайҙа үҙ яйына бара бирә, йә булмаһа бер туҡтаһа, ҡуҙғатып алып китермен тимә. Шулай көн оҙоно һабан артында йөрөйһөң, туҡтап хәл йыйып алырға ла ваҡыт булмай».

# Буранова Зөләйха Мәҙһар ҡыҙы



* «Иртәнән кискә тиклем эш эшләнек. Беҙ олораҡтар бесәнлектә бесән сабабыҙ, ә йәшерәк балалар урманға eләк-емешкә баралар. Ҡыш көнө ҡар көрәйбеҙ, үҙебеҙ киндер ыштан кейеп алғанбыҙ, кемдәрҙер тубыҡтарына һалам үреп алған булалар. Кискеһен ут яҡтыһына фронттағыларға ойоҡ, бейәләй бәйләп ебәрә торғайныҡ. Ҡышын бесәнгә йөрөйбөҙ, эҫкерт башын көрәтергә ебәрәләр, аяҡта туҙған сабата, салбар ҡайҙа инде ул саҡта, тубыҡҡа сепрәк урап йөрөйбөҙ. Яҙ булһа ни килеп тороп ашарға нәмә юҡ, ялан аяҡ көйө йыуаға барабыҙ, яҙғы ҡояшҡа йылынып ятҡан таштарға баҫып бәпкә, һарына һәм башҡа ашарға яраҡлы үләндәрҙе йыябыҙ. Хәҙер уйлап ҡуям, аттарға ла шуны ашата торғайнылар бит», - тип хәтерләй ул дәһшәтле йылдар хаҡында Зөләйха инәй.

Күпме ауырлыҡтар, кисереүсе ауылдың  аҡ күңелле ағинәйҙәре  мәсет йортон  ысын  мәғәнәһендә иман, изгелек һәм мәрхәмәтлелек йортона әйләндергәндәр.



# Ауылыбыҙ ағинәйҙәре оло хөрмәткә лайыҡ



# Мәңге хәтерҙә

22 июнь халҡыбыҙ хәтеренә уйылып ҡалған ҡара көн. Тап ошо көндөң таңында фашистар армияһы тыныс илебеҙгә хыянатсыл баҫып инә һәм Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Тарихта тәрән эҙ ҡалдырған, миллиондарса ғүмерҙе ҡыйған, илебеҙҙе емереклеккә дусар иткән оҙон дүрт йылға һуҙылған был һуғышҡа бер кем дә битараф түгелдер. Нисәмә йылдар үтһә лә, яу ҡырҙарында 27 миллиондан ашыу кешеһен юғалтҡан илебеҙ халҡы был ҡәһәрле һуғышты иҫенән сығарғаны юҡ. Ул быуындарҙан-быуындарға күсә, килсәктә лә был көндә йөрәктәребеҙҙә фашизмға ҡарата нәфрәт уты тоҡаныр.

Ҡулдарына ҡорал тота алырҙай ир-егеттәр һуғышҡа китеп бөткәс, тылдағы бөтә ауыр эш ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарт-ҡоро һәм бала-саға иңенә төшә. Эйе, күпме михнәт, мохтажлыҡ, ауырлыҡтар кисереп, һәм бик күп ҡорбандар менән яуланған был Бөйөк Еңеү.

**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында үҙҙәрен аямаған, беҙгә тыныс тормош яулаған , бабай-инәйҙәребеҙҙе, уларҙың батырлыҡтарын онотмайыҡ!**

Ватаныбыҙ яҙмышы хәл ителгән йылдарҙа улар, билдәрен биштән быуып, таң һарыһынан ҡара кискә тиклем эшләгәндәр. Иген иккәндәр, яңғыҙ һыйырҙарҙы һабанға егеп ер һөргәндәр, бесән сапҡандар, кәбән һалғандар, шул бесәнде ҡышҡы һыуыҡ-бурандарҙа: “Колхоз малын үлтермәйек, “- тип, үгеҙҙәй егелеп ташығандар. Ауыр һуғыштан һуңғы осорҙа балалар ошо михнәттәрҙе әсәйҙәр менән бергә күргәндәр. Шуның өсөн дә икмәктең, тыныслыҡтың ҡәҙерен белгәндәр, алдагы көндәргә ҙур өмөт менән йәшәгәндәр.

2 р-412

# ИСТОРИЧЕСКАЯ СПРАВКА

Об укрупненном колхозе "Кызыл-Тан" Старо-Мунасиповского сельского Совета Бурзянского района Башкирской АССР и документальных материалов фонда /бывших колхозов им. Карла Маркса, им.Сталина, "Партизан", "Кызыл-Тан" и "Маяк"/ /правление колхоза находится в населённом пункте дер. Ново-Мунасипово/.

Укрупненный колхоз "Кызыл-Тан" образовался 12 декабря 1963 года на базе укрупненного колхоза им.Сталина, который образовался в 1950 году на базе бывших колхозов им.Карла Маркса,"Партизан" и "Маяк".

В 1959 году к укрупненному колхозу им.Сталина присоединился колхоз "Кызыл-Тан" /дер.Тимирово/. Данный укрупненный колхоз до 27 ноября 1961 года действовал под им.Сталина. 27 ноября 1961 года укрупненный колхоз им.Сталина переименован в колхоз "Урал", 5 мая 1963 года данный укрупненный колхоз "Урал" переименован в колхоз "Маяк". 12 декабря 1963 года укрупненный колхоз "Маяк" переименован в колхоз "Кызыл-Тан"/ ныне действующий/.

Колхоз "Кызыл-Тан" находится в зоне производственного управления сельского хозяйства Бурзянского района.

Основная причина организации укрупненного колхоза – ведение многоотраслевого комплексного хозяйства.

Бывшие колхозы,вошедшие в настоящий колхоз "Кызыл-Тан"существовали:

1. Колхоз им.Карла Маркса с 1929 по 1950 год.
2. Колхоз "Партизан" с 1930 по 1950 год.
3. Колхоз "Кызыл-Тан" с 1930 по 1959 год.
4. Колхоз "Маяк" с 1941 по 1950 год.
5. Колхоз им.Сталина с 1950 по 1961 год.

Основное направление хозяйства колхоза "Кызыл-Тан" –животноводство и полеводство.

Со времени образования укрупненного колхоза документальные материалы образуются по отраслям деятельности колхозного производства /животноводства,полеводство и механизация/.

Документальные материалы бывших колхозов сохранились не полностью:

а/ колхоза им.Карла Маркса с 1937 по 1950 год.
б/ колхоз "Партизан" с 1936 по 1950 год.
в/ колхоз "Кызыл-Тан" с 1936 по 1959 год.
г/ колхоз "Маяк" с 1941 по 1950 год.
д/ колхоз им.Сталина с 1950 по 1960 год.

Среди сохранившихся документальных материалов имеются протоколы общих собраний колхозников и заседаний правления колхозов, производственно-финансовые планы,годовые отчеты,Государственный Акт на вечное пользование землей колхозами,книги по учету производства и другие книги.

Недостающие материалы разыскать не удалось. Они безвозвратно потеряны по беспечности бывших руководств колхозов.

Общее количество документальных материалов равно 62 единицам хранения.

# Ауылдың  беренсе тракторисы Баймырҙин Ирғәле Хажи улы



# Һуғыштан һуңғы осорҙағы трактор Тимер ауылы – 1950 йыл



# Һуғыштан һуңғы осорҙа иген урыу өсөн ҡулланылған молотилка



# ИҒТИБАРЫҒЫЗ ӨСӨН РӘХМӘТ!